*Приложение №2*
*к рабочей программе по изобразительному искусству, утв. пр. № 116 от 29.08.2022 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево

_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

**Контрольно-измерительные материалы промежуточной аттестации и критерии оценивания**

по литературному чтению

на родном (башкирском) языке

Уровень общего образования начальное
Класс 3
Учитель Габидуллина Гульназ Фагимовна

2022 г.

**Йыллыҡ контроль эш.**

**Йомарт август**.

Һеҙгә ниндәй миҙгел оҡшай? Әлбиттә, йәй, тиерһегеҙ. Мин дә йәйҙе яратам. Июнь айында каникул башлана, рәхәтләнеп һыу төшәһең. Июлдә еләк бешә, бесән саба башлайҙар...

Ә бына йәйҙең иң бай һәм йомарт айы - август. Баҡсала алма ҡойолған тауыш ишетелә. Ҡайһы берҙә алма ямғыры яуа: малайҙар ағас һелкетеп, иң тәмле алма һайлай. Түтәлдәргә күҙ һал. Унда кәбеҫтә, кишер, сөгөлдөр, ҡыяр, картуф өлгөрә... Сәскәләрҙең төҫтәре тағы ла сағыуыраҡ. Әйтерһең, улар ҙа уҡыусылар кеүек 1 сентябргә әҙерләнә. Урманда күләгәле урында ҡарағат, ҡурай еләге бешә. Бына урман ситендә бәшмәкселәр йөрөй. Ниндәй генә бәшмәк юҡ һауыттарында: аҡ, майлы, баллы бәшмәктәр...

Юл буйында иген баҫыуҙары күренә. Тиҙҙән комбайндар эш башлай. Иген үҫтереүе еңел түгел, ә уны ваҡытында йыйып алыуы тағы ла ауырыраҡ. Август йомарт булһа ла, ялҡауҙарҙы яратмай. Ял итергә ваҡыт юҡ...

**Тексты уҡы һәм эштәрҙе башҡар.**

1. Уҡыу тиҙлеген тикшереү

А) Тексты уҡый башла. Уҡытыусының сигналы буйынса туҡта. Туҡтаған урынды билдәләп ҡуй.

Б) Тексты уҡып бөт.

2. Тексты икенсе төрлө нисек атарға мөмкин? ...........................................................................

3. Текстың стилен билдәлә

1) фәнни текст

2) художестволы текст

4. Текстың төрөн билдәлә

1) һүрәтләү тексы

2) хәбәр итеү тексы

3) фекерләү тексы

5. Текстың планын төҙө

План.

1.

1.

1.

6. “Алма ямғыры” ни өсөн яуа?

7. Текстың төп фекерен белдергән һөйләмде тап һәм күсереп ал.

8. Текстан яуап табып була торған ике һорау төҙө.

9. Автор йәй айҙарын ни өсөн ярата?

Июнь -

Июль -

Август -

10. Шиғырҙы уҡы. Һүрәтләү сараларын табып яҙ.

**Йәй**

Эй туғай буйлап сабам.

Эйелеп, еләк ҡабам,

Ағастарға һыйынам,

Ҡош йырына ҡойонам.

Аяҡ аҫтым гөл генә,

Аяҡ аҫтым гел үлән.

Гүйә, йәшел келәмдән

Кинәнеп атлап киләм.

Ҡош йыры ҡанат ҡуя,

Күтәреләм күктәргә.

Болоттарыҙы йыйып алып,

Теҙеп ҡуям ептәргә.

Һүрәтләү -

Сағыштырыу -

11. Шиғырҙы уҡып сыҡ. Йәй көнө тәбиғәттә үҙеңде нисек тоторға кәрәк? Шул турала 3-4 ҡағиҙәне яҙып ҡуй.

Урманда беҙ уйнайыҡ

Ояларҙы боҙмайыҡ

Үләндәрҙе, сәскәләрҙе

Тапамайыҡ, өҙмәйек!

Ҡоштар-тәбиғәттең күрке

Үрсеһен, рәнйетмәйек

Балаларына теймәйек

Матурлыҡты кәметмәйек

Ҡырмыҫҡаларға ҡарата

Бер үк яһил булмайыҡ

Улар беҙҙең дуҫтарыбыҙ

Яуызлыҡтар ҡылмайыҡ!

Ағастарҙы һындырмайыҡ

Тәбиғәтте һаҡлайыҡ

Беҙҙә хәҙер йәйге селлә

Урманда ут яҡмайыҡ!

---

12. 5-6 һөйләмдән торған “Йәй килде” тигән инша яҙ.

---

**Баһалау критерийҙары**

| № | **Дөрөҫ яуап** | **Балл** |
|---|---|---|
| 1 | Эстән уҡыу тиҙлеге | |
| | 65-тән күберәк | **2 балл** |
| | 45-65 һүҙ | 1 балл |
| | 45-тән аҙыраҡ һүҙ | 0 балл |
| 2 | “Йәй”, “Йәйге байлыҡ” “Мин йәйҙе яратам” һ.б. булыуы мөмкин | 1. **балл** |
| 3 | Фәнни стиль | **1 балл** |
| 4 | Фекерләү тексы | **1 балл** |
| 5 | План:<br>1. Йәйҙе яратам.<br>2. Август – йомарт ай.<br>3. Август ялкауҙарҙы яртатмай | |
| | План 3 пункттан тора. Мәғәнәле һөйләмдәр менән төҙөлгән | **2 балл** |
| | План 2 пункттан тора. Һөйләмдәр тексты һәм пункттарҙың мәғәнәһен асыҡлай | 1 балл |
| | Ҡалған осраҡтарҙа | 0 балл |

| | | |
|---|---|---|
| 6 | Ҡайһы берҙә алма ямғыры яуа: малайҙар ағас һелкетеп, иң тәмле алма һайлай. | **1 балл** |
| 7 | Август йомарт булһа ла, ялҡауҙарҙы яратмай. Ял итергә ваҡыт юҡ... | **1 балл** |
| 8 | Һәр һорауға бер балл | **2 балл** |
| 8 | Һәр әкиәт 1 балл | **3 балл** |
| 9 | Июнь айында каникул башлана, рәхәтләнеп һыу төшәһең. Июлдә еләк бешә, бесән саба башлайҙар...Ә бына йәйҙең иң бай һәм йомарт айы - август. | **3 балл** |
| | Текстан яуап дөрөҫ табылған, 3 ай тураһында ла яҙылған – 3 б. | |
| | Яуаптар дөрөҫ табылған, хаталы күсерелгән. Йәки 2 айтураһында ғына яҙылған – 2 б | |
| | Яуаптар бар, ләкин текст менән тап килмәй – 1 б. | |
| | яуап юҡ – 0 б. | |
| 10 | Һүрәтләү: Ҡош йырына ҡойонам. Күтәреләм күктәргә. Болоттарыҙы теҙеп ҡуям ептәргә. | **2 балл** |
| | Сағыштырыу - Гүйә, йәшел келәмдән<br>Кинәнеп атлап киләм. | |
| 11 | Дөрөҫ яуап яҙылған, һөйләмдәр дөрөҫ төҙөлгән | **2 балл** |
| | 2 ҡағиҙә яҙылған, йәки өс ҡағиҙә яҙылған, ләкин һөйләм төҙөлөшөндә хаталар бар | 1 балл |
| | 1 ҡағиҙә яҙылған, йәки бер нимә лә яҙылмаған | 0 балл |
| 12 | Инша бәйләнешле, 5-6 һөйләмдән тора. (Орфографик хаталар төҙәтелә, ләкин иҫәпкә алынмай) | **2 балл** |
| | Бәйләнешле, һөйләмдәр һаны әҙерәк, йәки һөйләмдәр араһында бәйләнеш күҙәтелмәй | 1 балл |
| | Инша темаға тап килмәй | 0 балл |
| | **Бөтәһе** | **23 балл** |

**Баһалау**

| “5” | “4” | “3” | “2” |
|---|---|---|---|
| 90 – 100 % | 70-89 % | 50 – 79 % | 0 – 49 % |
| 21 – 23 балл | 17 – 20 балл | 13 – 16 балл | 0 – 12 балл |